**6 - сы  класс уҡыусылары  өсөн**

**башҡорт теленән**

**контроль эш тексы**

## Икмәк тураһында уйҙар

Беҙҙең илебеҙ икмәккә бай. Магазиндарҙа төрлө печенье,  ҡалас, бойҙай һәм арыш икмәктәре тулып ята.

Икмәк – ул йәшәү көсө, бөйөк бәхет!

Ләкин игенде үҙе үҫтермәгән,  аслыҡты бер ҙә күрмәгән ҡайһы берәүҙәр икмәктең ҡәҙерен белмәй. Урамдарҙа икмәк һыныҡтарын  типкеләгәнде күрергә мөмкин. Шуға беҙҙең, оло быуын кешеләренең эсе боша, күңеле әрней.

Икмәк – бөтә халыҡ байлығы. Уны ҡәҙерләргә, хөрмәтләргә, һаҡларға кәрәк.  (61 һүҙ. )